Министерство науки и высшего образования Российской Федерации
ФГБОУ ВО «Уфимский университет науки и технологий»
Сибайский институт (филиал) УУНиТ
Педагогический факультет

УТВЕРЖДАЮ:
Декан __________ Л.Р. Файзуллина
*(подпись, инициалы, фамилия)*
«20» июня 2025 г.

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА ДИСЦИПЛИНЫ**

**БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

*(наименование дисциплины)*

**37.03.01 Психология**

*шифр и наименование направления подготовки (специальности)*

направленность (профиль, специализация) **Практическая психология**

*наименование направленности (профиля, специализации)*

форма обучения **очно-заочная**

*(очная, очно-заочная, заочная)*

Сибай – 2025

Рабочая программа составлена на основании учебного плана основной профессиональной образовательной программы ОПОП ВО 37.03.01 Психология, направленность (профиль, специализация) "Практическая психология", одобренного Ученым советом СИ (филиала) УУНиТ (протокол №8 от 19.03.2025) и утвержденного директором 19.03.2025.

| | | |
|---|---|---|
| Заведующий кафедрой педагогики и психологии<br>*(наименование кафедры разработчика программы)* | ________<br>*(подпись)* | Кулуева Ю.А.<br>(Ф.И.О.) |
| Разработчик программы | ________<br>*(подпись)* | Ласынова Н.А.<br>(Ф.И.О.) |
| Руководитель образовательной программы | ________<br>*(подпись)* | Кулуева Ю.А.<br>(Ф.И.О.) |

## 1. Цель дисциплины. Перечень планируемых результатов обучения по дисциплине, соотнесенных с планируемыми результатами освоения основной профессиональной образовательной программы

### 1.1 Цель дисциплины

Дисциплина «Башкирский язык» относится к обязательной части Блока 1. Дисциплины (модули) учебного плана данного направления подготовки.

Дисциплина изучается на 3 курсе в 5-6 семестрах по очно- заочной форме обучения.

Цели изучения дисциплины: осуществлять деловую коммуникацию в устной и письменной формах на государственном языке Российской Федерации и иностранном(ых) языке(ах).

### 1.2 Перечень планируемых результатов обучения по дисциплине, соотнесенных с планируемыми результатами освоения основной профессиональной образовательной программы

Таблица 1 – Результаты обучения по дисциплине

| *Планируемые результаты освоения основной профессиональной образовательной программы (компетенции, закрепленные за дисциплиной)* | | *Код и наименование индикатора достижения компетенции, закрепленного за дисциплиной* |
|---|---|---|
| *код компетенции* | *наименование компетенции* | |
| УК-4. | Способен осуществлять деловую коммуникацию в устной и письменной формах на государственном языке Российской Федерации и иностранном(ых) языке(ах) | УК 4.1. Знает: принципы коммуникации в профессиональной этике; факторы улучшения коммуникации в организации, коммуникационные технологии в профессиональном взаимодействии; характеристики коммуникационных потоков; значение коммуникации в профессиональном взаимодействии; методы исследования коммуникативного потенциала личности; современные средства информационно- коммуникационных технологий. |
| | | УК 4.2. Умеет: создавать на русском и иностранном языке письменные тексты научного и официально-делового стилей речи по профессиональным вопросам; исследовать прохождение информации по управленческим коммуникациям; определять внутренние коммуникации в организации; производить редакторскую и корректорскую правку текстов научного и официально-делового стилей речи на русском и иностранном языке; владеть принципами формирования системы коммуникации; анализировать систему коммуникационных связей в организации. |
| | | УК 4.3. Владеет: реализацией способов устной и письменной видов коммуникации, в том числе на иностранном языке; представлением планов и результатов собственной и командной деятельности с использованием коммуникативных технологий |

**2. Структура и трудоемкость дисциплины**

Общая трудоемкость (объем) дисциплины составляет **3** зачетных единиц (з.е.), **108** академических часа.

Таблица 2 – Объем дисциплины

| Виды учебной работы | Всего, часов | Количество часов в 5 семестре | Количество часов в 6 семестре |
|---|---|---|---|
| Общая трудоемкость дисциплины | 108 | 36 | 72 |
| Контактная работа обучающихся с преподавателем по видам учебных занятий (всего) | 24,2 | 8 | 16,2 |
| в том числе: | - | - | - |
| лекции | - | - | - |
| лабораторные занятия | - | | - |
| практические занятия | 24 | 8 | 16 |
| Другие виды работ в соответствии с УП:<br>- эссе<br>- контрольная работа<br>- и др. | 1,2 | - | 1,2 |
| Самостоятельная работа обучающихся (всего) | 83,8 | 28 | 55,8 |
| Контактная работа по промежуточной аттестации | 1 | - | 1 |
| в том числе: | - | - | |
| зачет | 1 | - | 1 |
| зачет с оценкой | - | - | - |
| курсовая работа (проект) | - | - | - |
| экзамен | - | - | - |
| | | | |

### 3. Содержание дисциплины

Таблица 3 – Содержание дисциплины

| № | Раздел (тема) дисциплины | Виды деятельности | | | | Формы текущего контроля успеваемости |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | Лек., час | Лаб. раб., час | Практ. раб., час | СРС, час | |
| | **5 СЕМЕСТР** | | | | | |
| 1. | Исем. | - | - | 2 | 7 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 2. | Сифат. | - | - | 2 | 7 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 3. | Һан. | - | - | 2 | 7 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 4. | Алмаш. | - | - | 2 | 7 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| | ИТОГО: | - | - | 8 | 28 | |
| | **6 СЕМЕСТР** | | | | | |
| 5. | Ҡылым. | - | - | 2 | 6 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 6. | Ҡылым. | - | - | 1 | 5,8 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 7. | Ҡылым. | - | - | 2 | 6 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 8. | Рәүеш. | - | - | 1 | 6 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 9. | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре | - | - | 1 | 5 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 10. | Синтаксис. Пунктуация. | - | - | 2 | 6 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 11. | Ябай һөйләм синтаксисы. | - | - | 1 | 6 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 12. | Ябай һөйләм синтаксисы. | - | - | 2 | 5 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 13. | Ҡушма һөйләм синтаксисы. | - | - | 2 | 5 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| 14. | Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар. | - | - | 2 | 5 | ИЗ, Т,ПО, УО |
| | ИТОГО | - | - | 16 | 55,8 | |

ИЗ – индивидуальное задание, Т – тестирование, Д – защита (проверка) докладов (рефератов), УО – устный опрос, ПО – письменный опрос.

Таблица 4 – Практические (семинарские) занятия

| № | Наименование практических занятий | Объем, час. |
|---|---|---|
| 1. | Исем. | 2 |
| 2. | Сифат. | 2 |
| 3. | Һан. | 2 |
| 4. | Алмаш. | 2 |
| 5. | Ҡылым. | 2 |
| 6. | Ҡылым. | 1 |
| 7. | Ҡылым. | 2 |
| 8. | Рәүеш. | 1 |
| 9. | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре | 1 |
| 10. | Синтаксис. Пунктуация. | 2 |
| 11. | Ябай һөйләм синтаксисы. | 1 |
| 12. | Ябай һөйләм синтаксисы. | 2 |
| 13. | Ҡушма һөйләм синтаксисы. | 2 |
| 14. | Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар. | 2 |
| **Итого** | | **24** |

**4. Фонд оценочных средств для проведения промежуточной аттестации обучающихся по дисциплине**

**ПЛАНЫ СЕМИНАРСКИХ (ПРАКТИЧЕСКИХ) ЗАНЯТИЙ**

1. Исем.
2. Сифат.
3. Һан.
4. Алмаш.
5. Ҡылым.
6. Ҡылым.
7. Ҡылым.
8. Рәүеш.
9. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре
10. Синтаксис. Пунктуация.

11. Ябай һөйләм синтаксисы.
12. Ябай һөйләм синтаксисы.
13. Ҡушма һөйләм синтаксисы.
14. Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар.

## СОДЕРЖАНИЕ ТЕМ СЕМИНАРСКИХ (ПРАКТИЧЕСКИХ) ЗАНЯТИЙ

**Тема 1. Исем.**

1. Морфология. Исем.
2. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
3. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр.
4. Исемдәрҙең һан категорияһы.
5. Исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категорияһы.
6. Исемдәрҙең килеш категорияһы.
7. Исемдәргә грамматик анализ.

**Тема 2. Сифат.**

1. Сифат. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
2. Төп һәм шартлы сифат.
3. Сифат дәрәжәләре, уларҙың яһалышы.
4. Сифаттарҙың исем урынында ҡулланылыуы.
5. Сифаттарға грамматик анализ.

**Тема3. Һан.**

1. Һан. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
2. Һан төкөмсәләре: төп һандар, рәт һандары, бүлем һандары, сама һандары, йыйыу һандары, үлсәү һандары, кәсер һандары.
3. Ябай һәм ҡушма һандар. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.
4. Һандарға грамматик анализ.

**Тема 4. Алмаш.**

1. Алмаштарҙың грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
2. Алмаш төркөмсәләре: зат, күрһәтеү, һорау, билдәләү, билдәһеҙлек, юҡлыҡ, эйәлек алмаштары.
3. Алмаштарҙың грамматик категориялар менән үҙгәреше.
4. Алмаштарға грамматик анализ.

**Тема 5 - 7. Ҡылым.**

1. Ҡылымдың грамматик мәғәнәһе, морфологик һәм синтаксик билдәләре.
2. Ҡылымдың башланғыс формаһы. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар.
3. Ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ, күсемлелек-күсемһеҙлек категориялары.
4. Затлы һәм затһыҙ ҡылымдар.
5. Ҡылымдың һөйкәлеш категорияһы. Бойороҡ һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
6. Шарт һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
7. Теләк-өндәү һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үзгәреше.
8. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
9. Хәбәр һөйкәлеше: уның мәғәнәһе, яһалышы һәм зат-һан менән үҙгәреше.
10. Хәбәр һөйкәлешендәге ҡылымдарҙың заман формалары: үткән заман, хәҙерге заман, киләсәк заман.
11. Ҡылымдың йүнәлеш категорияһы: төп, ҡайтым, төшөм, уртаҡлыҡ, йөкмәтеү үнәлештәре. Ҡайтым, төшөм, уртаҡлыҡ һәм йөкмәтеү йүнәлештәренең яһалышы.

12. Ҡылым төркөмсәләре: исем ҡылым, уртаҡ ҡылым, сифат ҡылым, хәл ҡылым. Ҡылым төркөмсәләренең зат менән үҙгәрмәүе.

13. Исем ҡылым. Уның мәғәнәһе һәм яһалышы. Исем ҡылымдың исемгә оҡшаш яҡтары: уның һан, килеш һәм эйәлек заты менән үҙгәреүе.

14. Уртаҡ ҡылым. Уның мәғәнәһе һәм яһалышы. Уртаҡ ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ формаһы, синтаксик роле.

15. Сифат ҡылым. Сифат ҡылымдың заман формалары, синтаксик роле. Сифат ҡылымдың исем урынында ҡулланылыуы.

16. Хәл ҡылым, уның мәғәнәһе. Хәл ҡылымдың төрҙәре һәм синтаксик роле. Ҡылымдарға грамматик анализ.

**Тема 8**. **Рәүеш.**

1. Уның грамматик мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре һәм синтаксик билдәләре.
2. Башҡорт телендә рәүештәр яһалыуҙың төп ысулдары.
3. Рәүеш төркөмсәләре: хәл, ваҡыт, урын, күләм-дәрәжә, оҡшатыу-сағыштырыу, сәбәп, маҡсат рәүештәре.
4. Рәүеш дәрәжәләре, уларҙың яһалышы. Рәүештәргә грамматик анализ.

**Тема 9. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре**

1. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә, уларҙың үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмаһы.

2.Теркәүестәр. Составы буйынса теркәүестәрҙең бүленеше: ябай һәм ҡушма теркәүестәр. Мәғәнәләре буйынса теркәүестәрҙең бүленеше: теҙеүсе һәм эйәртеүле теркәүестәр. Теҙеүсе теркәүестәрҙең төркөмдәре: йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, бүлеү, аныҡлау теркәүестәре. Эйәртеүле теркәүестәрҙең төркөмдәре: шарт, сәбәп, һөҙөмтә, оҡшатыу теркәүестәре.

3. Бәйләүестәр. Бәйләүестәрҙең телмәрҙәге функцияһы. Бәйләүестәрҙең бүленеше: төп йәки эйәлек килештәге һүҙҙәр менән килгән бәйләүестәр, төбәү йәки төп килештәге һүҙҙәр менән килгән бәйләүестәр.

4. Киҫәксәләр. Киҫәксәләрҙең телмәрҙәге функцияһы. Киҫәксәләрҙең бүленеше: һорау киҫәксәләре, көсәйтеү-раҫлау киҫәксәләре, сикләү киҫәксәләре.

5.Модаль һүҙҙәр. Модаль һүҙҙәрҙең мәғәнәләре. Модаль һүҙҙәрҙең килеп сығышы һәм уларҙың синтаксик функциялары.

6. Ымлыҡтар. Ымлыҡтарҙың телмәрҙәге функцияһы. Ымлыҡтарҙың бүленеше һәм дөрөҫ яҙылышы.

7. Оҡшатыу һүҙҙәре тураһында дөйөм төшөнсә. оҡшатыу һүҙҙәренең төҙөлөшө һәм уларҙың синтаксик функциялары.

**Тема 10.** Синтаксис. Пунктуация.

1. Һүҙбәйләнеш. Теҙмә һәм эйәртеүле һүҙбәйләнеш.
2. Эйәртеүле һүҙбәйләнештә һүҙҙәрҙең синтаксик бәйләнеш юлдары.

**Тема 11 - 12. Ябай һөйләм синтаксисы.**

1. Ике составлы һөйләм.
2. Баш һәм эйәрсән киҫәктәр.
3. Бер составлы һөйләмдәр.Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре.
4. Тиң киҫәкле һөйләмдәр.
5. Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәр.

**Тема 13. Ҡушма һөйләм синтаксисы.**

1. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм.
2. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм.
3. Теҙмә ҡушма һөйләм өлөштәре араһында тыныш билдәләре.

**Тема 14. Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар.**

1. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр, уларҙа эйәртеүле бәйләнеш ысулдары.
2. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
3. Тура телмәр менән ситләтелгән телмәр.
4. Тура телмәрҙә тыныш билдәләре.

| Количество баллов | Критерии оценивания на вопросы для аудиторной работы |
|---|---|
| 2 | При ответе на вопрос демонстрирует свободное владение заявленной проблемой, умение грамотно использовать физический понятийный аппарат в рамках рассматриваемого вопроса, не использует конспект семинарского занятия как план при ответе. |
| 1 | При ответе на вопрос студентом допущено несколько существенных ошибок в толковании основных понятий. Логика и полнота ответа страдают заметными изъянами. Имеются принципиальные ошибки в логике построения ответа на вопрос. |
| 0 | Дан в целом неверный ответ |

## ВОПРОСЫ К ЗАЧЕТУ

1. Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәр системаһы һәм уларҙың классификацияһы.
2. Башҡорт теленең тартынҡы өндәр системаһы һәм уларҙың классификацияһы.
3. Хәреф һәм өн. Уларҙың айырмаһы. Башҡорт теленең төп орфографик нормалары.
4. Рус теле һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы.
5. Һүҙҙәрҙе айырып, ҡушып, дефис аша яҙыу.
6. Һүҙ составы: тамыр, ялғау. Ялғауҙарҙың төрҙәре.
7. Исем һүҙ төркөмө. Уның һан категорияһы.
8. Исемдәрҙең эйәлек категорияһы.
9. Исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы.
10. Исемдәрҙең килеш категорияһы.
11. Эйәлек ялғаулы исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше.
12. Сифат. Төп  һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре.
13. Һан. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.
14. Алмаш. Алмаш төркөмсәләре. Уларҙың килеш менән үҙгәреше.
15. Ҡылым. Ҡылым һөйкәлештәре.
16. Ҡылымдың зат һәм һан категорияһы.
17. Ҡылымдың йүнәлеш категорияһы.
18. Башҡорт телендә ҡылымдың затһыҙ формалары.Ҡылым төркөмсәләре.
19. Ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ, күсемлелек-күсемһеҙлек категорияһы.
20. Рәүеш. Рәүеш дәрәжәләре. Рәүеш төркөмсәләре.
21. Теркәүестәр. Теркәүестәрҙең бүленеше. Теҙеүсе теркәүестәрҙең төркөмдәре. Эйәртеүле теркәүестәрҙең төркөмдәре.
22. Бәйләүес. Бәйләүестәрҙең бүленеше.
23. Киҫәксәләр. Киҫәксәләрҙең бүленеше.
24. Модаль һүҙҙәр.
25. Ымлыҡтар. Ымлыҡтарҙың дөрөҫ яҙылышы.
26. Оҡшатыу һүҙҙәре.
27. Һүҙбәйләнеш. Теҙмә һәм эйәртеүле һүҙбәйләнеш.
28. Эйәртеүле һүҙбәйләнештә һүҙҙәрҙең бәйләнеш юлдары.
29. Ике составлы һөйләм. Ябай һәм ҡушма эйә. Ябай һәм ҡушма хәбәр. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.
30. Бер составлы һөйләмдәр. Баш киҫәк эйәнән торған бер составлы һөйләм, уның грамматик үҙенсәлектәре.

31. Баш киҫәге хәбәрҙән торған бер составлы һөйләмдәр.
32. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре: аныҡлаусылар (тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар), өҫтәлмәлектәр, тултырыусылар (тура һәм ситләтелгән тултырыусылар).
33. Хәлдәр: рәүеш хәле, урын хәле, ваҡыт хәле, шарт хәле, сәбәп хәле, маҡсат хәле, кире хәл.
34. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Тиң киҫәктәрҙең үҙ-ара бәйләнеше. Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр һәм тыныш билдәләренең ҡуйылышы.
35. Өндәш һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәр эргәһендә тыныш билдәләре.
36. Инеш һүҙҙәр һәм инеш һөйләмдәр. Улар эргәһендә тыныш билдәләре.
37. Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәр. Аныҡлаусыларҙың айырымланыуы. Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. Хәл әйтемдәренең айырымланыуы.
38. Тура телмәр менән ситләтелгән телмәр. Тура телмәрҙә тыныш билдәләре.
39. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдә тыныш билдәләре.
40. Теркәүесhеҙ теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесhеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
41. Эйәртеүле ҡушма һөйләм. Баш һәм эйәрсән һөйләм.
42. Эйә һөйләм. Препозитив һәм постпозитив эйә һөйләм. Уларҙа тыныш билдәләре.
43. Препозитив һәм постпозитив хәбәр эйәрсән һөйләм. Уларҙа тыныш билдәләре.
44. Аныҡлаусы эйәрсән һөйләм.
45. Тултырыусы эйәрсән һөйләм.
46. Хәл эйәрсән һөйләмдәр. Уларҙың төрҙәре.

Критерии оценивания для зачета для студентов очно- заочной формы обучения:
Индивидуальная оценка по результатам обучения студента определяется по шкале «зачтено - не зачтено».
Оценки «зачтено» заслуживает студент, обнаруживший знание учебного материала и посещавший аудиторные занятия, установленные учебной программой данной дисциплины. Необходимым условием выставления оценки «зачтено» является успешное выполнение заданий в рамках самостоятельной работы студентов. Дисциплина зачитывается студентам, выполнившим вышеуказанные условия и усвоившим взаимосвязь основных понятий дисциплины.
Дисциплина считается не зачтенной тем студентам, которых недостаточные знания в знаниях основного учебного материала, не посещали аудиторные занятия или не выполнили задания в рамках СРС.

## ТЕСТОВЫЕ ЗАДАНИЯ

### Тестовые задания

**1. Башҡорт алфавиты ниндәй графика нигеҙендә төҙөлгән?**

1) А. Латин графикаһы
2) Б. Ғәрәп графикаһы
3) В. Урыҫ графикаһы (кириллица)
4) Г. Грек графикаһы

**2. Түбәндә бирелгән һүҙҙәр араһынан хәрефтәр һаны өндәр һаны менән тап килгән һүҙҙе билдәләгеҙ:**

1) А. Емеш
2) Б. Яулыҡ
3) В. Еләк
4) Г. Аҡъяр
5) Д. Юрғашты

**3. Һуҙынҡы өндән башланған һүҙҙе күрһәтегеҙ:**

1) А. Юлдаш
2) Б. Ямғыр
3) В. Еләк
4) Г. Йәйғор
5) Д. Урман

**4.Түбәндәге һүҙҙәр араһынан сингармонизм законына буйһонмаған һүҙҙе табығыҙ:**

1) А. Полкты
2) Б. Ҡошсолоҡ
3) В. Тормоштоң
4) Г. Өйҙө
5) Д. Төҙөлөштөң

**5. Сания Әхәт ҡыҙы Абдуллина профессияһы буйынса - уҡытыусы. Һөйләмдең хәбәрен табып, уның ниндәй һүҙ төркөмөнән килгәнен билдәләгеҙ:**

1) А. Исем
2) Б. Сифат
3) В. Һан
4) Г. Ҡылым
5) Д. Рәүеш

**6. Айырылғанды айыу ашар. Мәҡәлдә тәүге һүҙ һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килеүен билдәләгеҙ:**

1) А. Эйә
2) Б. Хәбәр
3) В. Тултырыусы
4) Г. Аныҡлаусы
5) Д. Хәл

**7. Һөйләшер һүҙ күп әле. Был һөйләмдә сифар ҡылым ниндәй заманды белдерә:**

1) А. Хәҙерге заман сифат ҡылым
2) Б. Үткән заман сифат ҡылым
3) В. Киләсәк заман сифат ҡылым
4) Г. Шаһитлы үткән заман
5) Д. Билдәһеҙ киләсәк заман

**8. Ошо ергә былтыр ҙа еләккә килгәйнек. Был һөйләмдә алмашты табып, уның төркөмсәһен билдәләгеҙ:**

1) А. Зат алмашы
2) Б. Күрһәтеү алмашы
3) В. Һорау алмашы
4) Г. Юҡлыҡ алмашы
5) Д. Билдәһеҙлек алмашы

**9. Ҡайһы һүҙ бер генә ижектән тора:**

1) А. Алтынсы
2) Б. Ауыл
3) В. Тау
4) Г. Етен
5) Д. Ғилем

**10. Һаңғырау тартынҡынан башланған һүҙҙе табығыҙ:**

1) А. Башҡортостан
2) Б. Ҙур
3) В. Ғалим
4) Г. Ҡарындаш
5) Д. Заман

**11. Ап- аҡ, ифрат матур сифаттары ниндәй дәрәжәлә?**
1) А. Төп дәрәжәлә
2) Б. Сағыштырыу дәрәжәһе
3) В. Артыҡлыҡ дәрәжәһе
4) Г. Аҙһытыу дәрәжәһе
5) Д. Дәрәжәһе юҡ

**12. Ҡағиҙә буйынса дөрөҫ яҙылған һүҙҙе күрһәтегеҙ:**
1) А. Киоскта
2) Б. Юристҡа
3) В. Классты
4) Г. Металдан
5) Д. Лозунгты

**13. Һандарҙа ялғауҙарҙың яҙылышы ҡағиҙәгә тап килгән һүҙҙе күрһәтегеҙ:**
1) А. 23-сө апрель
2) Б. 1950-се йыл
3) В. 1-се һанлы интернат –мәктәп
4) Г. 12-нсе рәт
5) Д. XX –се быуат

**14. Уларға бары дөрөҫөн генә әйтһендәр. Был һөйләмдә ҡылымды табып, уның һөйкәлешен билдәләгеҙ:**
1) А. Хәбәр һөйкәлеше
2) Б. Бойороҡ һөйкәлеше
3) В. Теләк һөйкәлеше
4) Г. Шарт һөйкәлеше
5) Д. Ниәт-маҡсат һөйкәлеше

**15. Ҡайһы һүҙҙең бүленеше юлдан юлға күсереү ҡағиҙәһенә тап килгән:**
1) А. А-тайҙы
2) Б. Йыл-ъяҙма
3) В. Йә-йғор
4) Г. Ауылдаш-тар
5) Д. Ҡыу-аҡ

**16. Урыҫ теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышы дөрөҫ булған һүҙҙе күрһәтегеҙ:**
1) А. Сентяберҙә
2) Б. Автомобильдә
3) В. Шампуньды
4) Г. Класста
5) Д. Поезда

**17. Башҡортмон һүҙендә ниндәй категория ялғауы бар?**
1) А. Эйәлек заты ялғауы
2) Б. Хәбәрлек заты ялғауы
3) В. Килеш ялғауы
4) Г. Күплек ялғауы
5) Д. Ялғау юҡ

**18. Ҡайһы һүҙҙең яҙылышы дөрөҫ:**
1) А. Көньяҡ
2) Б. Гөльемеш
3) В. Аҡъюлов
4) Г. Байъегет
5) Д. Аҡъегет

**19. Тик үҙгәртеүсе ялғауҙар ғына ҡабул иткән һүҙҙәр бирелгән юлды күрһәтегеҙ:**

1) А. Блсы, юлһыҙ, юлдаш
2) Б. Эшсе, эшсән, эштә, эшләү
3) В. Иректе, иректән, ireккә, иректең
4) Г. Ташсы, ташлы, ташһыҙ
5) Д. Елкәй, елһеҙ, елләтеү

2**0. Йығылыу, тәгәрәү, ҡолау, ауыу һүҙҙәрен мәғәнәләре буйынса нисек атап була?**

1) А. Синонимдар
2) Б. Антонимдар
3) В. Омонимдар
4) Г. Омографтар
5) Д. Омофондар

**Критерии оценки выполнения тестовых заданий для студентов очно-заочной формы обучения:**

- оценка "неудовлетворительно" выставляется студенту, если студент решил правильно менее 10 % заданий;
- оценка "удовлетворительно" выставляется студенту, если студент правильно решил от 10 до 40 % заданий;
- оценка "хорошо" выставляется студенту, если студент правильно решил от 40 до 70 % заданий;
- оценка "отлично" выставляется студенту, если студент правильно решил от 70 до 100 % заданий.

**Задания для контрольной работы**

**Контрольная работа № 1.**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһарға, һүҙ составын билдәләргә.

*Күп тә үтмәне, ҡайҙандыр ҡалҡып сығып өлгөргән ваҡ болоттар, бергә ҡушылып, ер тетрәтергә, уттарын сәсергә тотондолар.* (И. Насыри).

2. Бер ҡушма һан алып, унан мөмкин тиклем төрлө юл менән яһалған сама һандары яҙығыҙ.

3. Ике төп (хәл) һәм ике ваҡыт рәүеше алып, уларҙың дәрәжә формаларын яҙығыҙ, бер-икеһе менән һүҙбәйләнеш төҙөгөҙ.

4. «Туғандар» һүҙен эйәлек категорияһы затының берлек һәм күплек формаларында үҙгәртергә.

5. Сифат урынында ҡулланылыусы күрһәтеү алмаштары менән ике һөйләм яҙығыҙ.

**Контрольная работа № 2.**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ эшләгеҙ.

*Беҙҙең быуын өсөн Ватан тағы шуға икеләтә ғәзиз: уның именлеге өсөн күп атайҙар менән ағайҙар ғүмерҙәрен бирҙеләр.* (М.Кәрим).

2. Бер сама һаны менән ҡушма уртаҡлыҡ исемдән һүҙбәйләнеш төҙөп, килеш менән үҙгәртегеҙ.

3. Эйәлек категорияһының III зат формаһындағы бер һорау алмашын эйәлек һәм төбәү килештәрҙә алып,берәр һөйләм яҙығыҙ.

4. Тамыр, яһалма һәм парлы рәүештәргә икешәр ми1ал яҙып, уларҙың ниндәй мәғәнәүи төркөмгә ҡарағанлығын әйтегеҙ, берәүһенең дәрәжә формаларын бирегеҙ.

5. Коллектив (төркөмлө) күплекте аңлатыусы исем менән һөйләм яҙығыҙ.

**Контрольная работа № 3.**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ эшләгеҙ.

*<u>Нисектер</u> <u>ҡыҙыңдың</u> исеме,*
*Белмәйем, ҡорҙаш, уны;*
*<u>Тик</u> беләм: ул - алма битле,*
*<u>Һәм</u> <u>бик</u> <u>бәләкәй</u> ҡулы.*

(Р.Ниғмәти).

2. Предметтың, хәл – күренештең билдәле бер урынға һәм ваҡытҡа ҡарағанлығын белдереүсе икешәр сифат яҙығыҙ. Уларҙың ниндәй сифат икәнен әйтегеҙ.

3. Төрлө юл менән яһалған ҡ юҡлыҡ алмашы яҙығыҙ, береһен килеш менән үҙгәртегеҙ.

4. Нумератив һүҙҙәр менән биш һүҙбәйләнеш яҙығыҙ.

5. «Ҡәнәғәт» һүҙен хәбәрлек категорияһының зат формаларында яҙығыҙ, береһе менән һөйләм төҙөгөҙ.

**Критерии оценки (в баллах):**

| Критерии оценивания контрольной работы | Количество баллов |
|---|---|
| Студент выполнил работу без ошибок и недочетов; допустил не более одного недочета | 5 |
| Студент выполнил работу полностью, но допустил в ней не более одной негрубой ошибки и одного недочета или не более двух недочетов; | 4 |
| Студент правильно выполнил не менее половины работы или допустил: не более двух грубых ошибок; или не более одной грубой и одной негрубой ошибки и одного недочета; или не более двух-трех негрубых ошибок; или одной негрубой ошибки и трех недочетов; или при отсутствии ошибок, но при наличии четырех-пяти недочетов; | 3 |
| Студент правильно выполнил менее половины работы | 2 |

**Работа при обсуждении вопросов аудиторной работы**

**Модуль 1. Лексикология башкирского языка**

1. Түбәндәге үҙләштерелгән һүҙҙәргә төп башҡорт һүҙҙәренән синонимдар табығыҙ. Уларҙы ҡулланып өс һөйләм төҙөгөҙ.

Ғөмүми, мосафир, нәтижә, фәҡәт, ҡәҙер, фекер, ватан, заман, ғазап, вәғәҙә, ғәйрәт, ғүмер, сәфәр, ғәзиз, фәҡир, мөрәжәғәт, инҡар итеү, тәҡдир, хәсрәт, хәүеф, диуана, мөхәббәт, януар.

2. Бирелгән һүҙҙәргә тура килгән фразеологизмдар яҙығыҙ, улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ:

Өндәшмәү, алдау, шатландырыу, ҡамасаулау, ялҡау, асығыу, ҡурҡыу, аптырау, хәйләкәр, эреләнеү, яҡлау, күңелһеҙ, тиҙ, буйһоноу, туҡмау, зыянһыҙ кеше, үпкәсел, сит кеше, мотлаҡ.

3. Бирелгән фразеологизмдарға антоним фразеологизмдар яҙығыҙ:

Баш бирмәү, ер аяғы ер башы, аҡыллы баш, асыҡ ауыҙ, баш етеү, күҙ асып йомғансы, танау сөйөү, кәбеҫтә һурпаһын әҙ эскән, тир түгеү, арҡыры төшөү, бер ҡашыҡ һыуға һалып йоторлоҡ, ауыҙға алғыһыҙ, ауыҙыңа бал да май, баҙары артыу, бармаҡ менән һанарлыҡ.

4. Бирелгән фразеологизмдарға синоним фразеологизмдар яҙығыҙ:

Ағас атҡа атландырыу, аҡты ҡара (ҡараны аҡ) тип әйтеү, аҡылға бер төрлө, асыу ҡабарыу, ләм-мим тип әйтмәү, түбәһе күккә тейеү, балтаһы һыуға төшөү, берҙе биш итеү, энә күҙенән үткәреү, дөйә ҡойроғо ергә еткәс, ете диңгеҙ аръяғы, ике ҡанат – бер ҡойроҡ, ике тамсы һыу кеүек, йәшен тиҙлеге менән, ҡайыш аҫты бушау.

5. Түбәндә бирелгән фразеологик берәмектәрҙе һүҙ төркөмө буйынса айырып яҙығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ (ҡылым фразеологизмдар, сифат фразеологизмдар, рәүеш фразеологизмдар, исем фразеологизмдар, ымлыҡ фразеологизмдар).
Йөрәк ҡурҡыу, ауыҙ астырмау, күҙ сығарғансы (әйтеү), йөрәк сығыу, йоморо баш, йөрәк ҡубыу, соҡор елкә, башы һау булһын, йөрәк өшөү, йөрәк ярылыу, йөрәк яныу, ҡуш йөрәк, күҙе менән ашарҙай булып ( ҡарап тороу), йөрәк етмәү, туң йөрәк, йөрәк һыҡрау, ауыҙ итеү, ҡул ҡаушырып (тик ултырыу, тик тороу), ауыртмаған башҡа тимер таяҡ, ҡара йөрәк, ҡурҡаҡ йөрәк, йөрәк табанға төшөү, ярһыу йөрәк, ныҡ йөрәк, саф йөрәк, башы сәсрәһен (сәсрәгер(е)), күҙе сыҡҡыр(ы), бәләһенән баш- аяк, ауыҙ асып йөрөү, ауыҙ бешеү, ауыҙ йырыу, йоҡа елкә, ауыҙына бал да май, ауыҙыңдан ел алһын, ауыҙыңа май, мәшәү баш, башы иҫән булһын, аяҡ- ҡулы һыҙлауһыҙ (иҫән- һау) булһын, осло күҙ, ҡоро һүҙ, оло башын кесе итеп (килеү), баш баҫып (эшләү), йөрәк һалып ( башҡарыу).

## Модуль 2. Морфология башкирского языка

1. **Бирелгән һүҙҙәрҙе тейешле формаларҙа үҙгәртегеҙ. Һөйләм төҙөгөҙ.**

*Йөрәк* – берлек һанда, эйәлек категорияһының 1-се зат берлеге, сығанаҡ килештә.

*Сәскә* - күплек һанда, эйәлек категорияһының 3-сө зат берлеге, төбәү килештә.

*Кеше* – күплек һанда, эйәлек категорияһының 2-се зат күплеге, төшөм килештә.

*Йондоҙ* – берлек һанда, эйәлек категорияһының 2-се зат берлеге, хәбәрлек категорияһының 1-се зат берлеге.

*Күҙ* – күплек һанда, эйәлек категорияһының 1-се зат берлеге, төбәү килештә.

*Юл* – күплек һанда, төп килештә.

*Моң* – берлек һанда, эйәлек категорияһының 3-сө зат берлеге, төшөм килештә.

*Шишмә* - берлек һанда, эйәлек категорияһының 3-сө зат берлеге, төп килештә.

2. **Бирелгән һүҙҙәрҙе килештә үҙгәртегеҙ:**

Киоск, митинг, танк, ландшафт, Кирилл, Минск, кросс, жюри, автомобиль, лагерь, кафе, Юлдашев, артист, Брест, меню, металлург, БР.

**3. Текстан сифаттарҙы табып, уларҙың дәрәжәләрен билдәләгеҙ.**

Ныҡлы кәүҙәһенә килешеп торған зәңгәрһыу төҫтәге плащының яғаһындағы урмансы петлицаһына өсәр эре йондоҙ беркуетелгән ир машинанан төштө. Яланбаш. Ҡап-ҡара ҡуйы сәстәре тигеҙ итеп ҡырлған ҡалын елкәһенә табан ишелеп-бөҙрәләнеп барып бөтә. Саҡ ҡына көмрөрәк тура танау, сирыш әҫәре булмаған ихтыяри йөҙ... (Н. Мусин.)

**4. Өҙөктән һандарҙы табып, төркөмсәләрен, яһалыштарын билдәләгеҙ. “Бер генә тапҡыр” һүҙбәйләнештәренең нисә тапҡыр һәм ни өсөн шул тиклем ҡабатланып килеүенең сәбәбен аңлатығыҙ.**

...Бер тапҡыр ҡалас ашау өмөтө менән беҙ егерме биш саҡрым ергә йәйәү барырға әҙербеҙ. Тамаҡ һаулыҡмы, ҡомһоҙлоҡмо, иҫәрлекме был? Әллә башҡа берәй нәмәме? Мин хәҙер үткән ғүмерҙең сал түбәһенән артҡа әйләнеп ҡарайым да шундай фекергә киләм: хикмәт беҙҙә, беҙҙең рухта булған. Ун михнәттең араһында бер рәхәттең ҡәҙерен, йөҙ әсенең эсендә бер татлының тәмен белеп үҫкәнбеҙ беҙ. Шуға күрә лә һуңыраҡ, башҡа аң, йөрәккә дәрт ингәс тә, беҙ әсәйҙәребеҙҙең бер фатихаһы хаҡына мең һынау үтергә әҙер булдыҡ; һөйгәндәребеҙҙең күҙҙәренә тик бер генә тапҡыр тултырып ҡарау өсөн, күкрәктәрҙәге асыҡ яраларҙы устарыбыҙ менән ҡыҫып, меңәр саҡрымлыҡ араларҙы араға һанамай, һуғыш яланынан бер генә көнгә, бер генә сәғәткә тыуған төйәктәребеҙгә ынтылдыҡ. Һәм, аҙаҡ килеп, Тыуған илдең бер генә ус тупрағы, бер генә тамсы һыуы, бер генә һулам һауаһы өсөн, Ватан ҡабул иткән саҡта, бөп-бөтөн көйө ғүмерҙәребеҙҙе бирҙек... (М.Кәрим)

**5. Түбәндә бирелгән нумератив һүҙҙәрҙе ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.**

Бәйләм, грамм, дана, киҫәк, күтәрем, ҡалаҡ, ҡарыш, ҡосаҡ, өйкөм, өйөм, саҡрым, телем, тотам, ус, һыныҡ, эҫкерт.

**6. *Кем, нимә, теге* алмаштарын күплектә килеш менән үҙгәртеп яҙығыҙ. Береһен эйәлек, икенсеһен сығанаҡ, өсөнсөһөн төшөм килештә килтереп, өс һөйләм төҙөгөҙ.**

**7. Түбәндәге ҡылымдарҙың башланғыс формаһын билдәләгеҙ:** алыҫайыу, асыу, баулау, бәхәсләшеү, инеү, йөрәкһеү, күгәреү, ҡулланыу, уҡыу, шатланыу, әйтеү, йылмайыу, көрһөнөү, ашығыу, уйлау, күрешеү, теҙләнеү.

**8. Ҡылымдарҙы тейешле грамматик категорияларҙа үҙгәртегеҙ, һөйләмдәр төҙөгөҙ.**

*Төш* – барлыҡта төп йүнәлештә хәбәр һөйкәлеше шаһитлы үткән заман 1-се зат берлектә.

*Күр* – бойороҡ һөйкәлеше 3-сө зат берлектә юҡлыҡта төп йүнәлештә.

*Көт* – шарт һөйкәлеше 2-се зат берлектә төп йүнәлештә

*Эҙлә* - хәбәр һөйкәлеше шаһитһыҙ үткән заман 2-се зат күплектә юҡлыҡта уртаҡлыҡ йүнәлешендә.

*Йырла* – үткән заман сифат ҡылым йөкмәтеү йүнәлешендә..

*Түҙ* – хәбәр һөйкәлеше билдәһеҙ киләсәк заман 1-се зат берлектә төп йүнәлештә.

*Уҡы* – юҡлыҡта хәбәр һөйкәлеше шаһитлы үткән заман 2-се зат күплектә йөкмәтеү йүнәлешендә.

*Йыу* – барлыҡта исем ҡылым ҡайтым йүнәлешендә.

*Ҡурҡ* – юҡлыҡта йөкмәтеү йүнәлешендә уртаҡ ҡылым.

*Һөйлә* - барлыҡта хәбәр һөйкәлеше хәҙерге заман 2 –се зат берлектә төп йүнәлештә.

**9. Текстан рәүештәрҙе һәм улар эйәреп килгән һүҙҙәрҙе табып, яҙып алығыҙ, һәр бер рәүештең ниндәй төркөмсәнән икәнен әйтегеҙ.**

Көн буйы яуған ямғыр кискә ҡарай ҡапыл туҡтаны. Китмәҫкә килгәндәй түшәлеп торған болоттар әллә ни арала таралып та өлгөрҙө. Зәңгәр күккә ҡояш яңынан хужа булды. Тик ҡайҙалыр бейектә аҙашып ҡалған һуңғы тамсылар һирәк-мирәк тамғылап ҡуя.

Өй янындағы бүрәнә өҫтөндә Айҙар менә Ғабдулла байтаҡтан бирле һүҙһеҙ ултыра. Малайҙарҙың кәйефе һүрән күренә. Эшһеҙ ҡалған кешеләр шундайырыҡ булалар шул.

Айҙар һеңлеһе Гөлнурҙы саҡырып алды ла Яҡупты тиҙ генә алып килергә ҡушты. Ялан аяҡтары менән бысраҡҡа сәпелдәтә-сәпелдәтә, Гөлнур Яҡуптарға ҡарай шәп итеп йүгерҙе.(М. Кәрим.)

**10. Күп нөктәләр урынына мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ.**

Әле генә имән төбөндәге эскәмйәләрҙәге сүп-сарҙы һепереп ташланым, ..., был эште миңә анау күгәрсен күҙҙәре ҡушты. ..., башта уларҙың сафлығына һоҡланып ҡарап торҙом да, үҙем һиҙмәҫтән ҡулыма һепертке алдым. Һеперткегә мин былай һирәк тотонам. Донъя сүбен бер мин генә һепереп бөтөрә алмам, тим.

Ваҡ-төйәк нәмәләрҙең онотолмауы тураһындағы фекргә шуны өҫтәргә ...: күп йәһәттән хикмәт ваҡиғаларҙың ниндәй булыуында ..., һинең рухыңдың, аңыңдың, хәтерләү аппаратыңдың нисек, ниндәй тулҡынға көйләнеүендә. Улар бәғзе нәмәләрҙе ғүмерлеккә үҙләштереп ҡала, нимәләрҙелер үткәрә лә ебәрә. (М.Кәрим.)

## Модуль 3. Синтаксис башкирского языка

**1. Түбәндәге һөйләмдәрҙе һүҙбәйләнештәргә тарҡатығыҙ, уларҙың мәғәнә мөнәсәбәтен һәм грамматик бәйләнеш төрөн күрһәтегеҙ, эйәртеүсе киҫәген билдәләгеҙ.**

Тора-бара үҙенең холҡон күрһәтә башланы: көн дә тиерлек эсеп ҡайта, Ғәлиәгә юҡ-бар өсөн дә бәйләнә, тауыш ҡуптара торған булып китте. (Н.Мусин). Ғибат үҙе аяҡсы булып йөрөгән булған. (Ж. Кейекбаев). Ул иҫтәлекле иртәлә Флүрә үҙенең бүлмәһендә ултыра һәм ҡото осоп сәғәткә ҡарай ине. (Ш. Хажиәхмәтов). Солан тупһаһынан тайып китмәҫ өсөн, көмөш һаплы таяғын һаҡ ҡына алдан төшөрҙө, уның артынса аяҡтарын шыуҙырҙы. (Р. Ураҙғолов).

**2. Текстан бер составлы һөйләмдәрҙе табығыҙ, төрөн билдәләгеҙ.**

Аяҙ күктә, бейектә-бейектә, торналар тубы оса. Уларҙың моңло сыңрауы һауаларҙы ярып алыҫтарға тарала. Тыуған ерҙән туймаһалар ҙа, ҡышҡылыҡҡа туйынырлыҡ ерҙәргә - йылы яҡтарға китәләр.

Беҙҙең яҡтарҙа торналарҙың 14 төрө билдәле булһа ла, иң киң таралғаны – һоро торна. Оҙон ҡара муйынлы был ҡоштоң томшоғо йәшкелт һары төҫтә була, башында аҡ ҡуырһындар үҫә, ҡойроғо ҡуйы, оҙон ҡаурыйлы, ҡараҡ төҫтә, аяҡтары ҡара. Һоро торналар һаҙлыҡтарҙа, тәпәш ҡыуаҡтар араһында, ер өҫтөнә оя ҡора. Ғәҙәттә ике йомортҡа һалып, бала сығара. Улар үҫемлек, төрлө бөжәктәрҙе, тәлмәрйендәрҙе, кеҫәрткеләрҙе, ваҡ кимереүселәрҙе ашай.

Был ҡоштарҙы атыу бөтә ерҙә лә тыйылған. Башҡорттарҙа борондан ҡалған юрау ҙа бар – торна атһаң, ҡаза килә, тиҙәр. Шуға ла халыҡта торналарҙың ояларын туҙҙырмайҙар.

( Е. Кучеровтан.)

**3. Өҙөктө уҡығыҙ. Ҡурай тураһында әйтелгән фекерҙәр менән ризаһығыҙмы? Иҫбатлап һөйләгеҙ. Тиң киҫәктәрҙе табығыҙ: улар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып, ниндәй һүҙ төркөмдәренән килгәндәр, үҙ-ара нисек бәйләнгәндәр?**

Ҡысҡырмай Аҫылбай, күкрәк менән йырлай, рәхмәт төшкөрө, моңо, әйтерһең, йөрәгенән һығылып сыға. Электән, бала саҡтан уҡ тыныс ҡына тыңлай алмай ҡурай моңон Әхмәтзәки. Ҡайҙалыр йыраҡҡа, сал тарихҡа, аҡбуҙаттар, Урал батырҙар тормошона алып киткәндәй, онотолған тойғоларҙы, йоҡомһораған тамырҙарҙы терелтеп ебәргәндәй ҡурай моңо... Тыпыр-тыпыр аттар уҙышҡаны, йәшел туғайҙарҙа ҡойроҡ сәнсеп ҡолондар сабышҡаны, тау яғалап ҡуйҙар йөрөгәне, үләндәр, йылғалар һөйләшкәне лә, балаларын юғалтҡан инә бүре илауы, ер һыҡтауы ла бар унда... Тәбиғәттә үҫкәнгә шулай тәбиғи моңдар сығара микән ул? Их ҡурай, моңло ҡурай...

(Р.Байымов.)

**4. Тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп алығыҙ. Тиң киҫәктәрҙе һәм уларҙы дөйөмләштереүсе һүҙҙәрҙе табып, аҫтарына һыҙығыҙ, уларҙың ниндәй һөйләм киҫәге булыуын белегеҙ.**

Мансур һиҙҙермәй генә Мәрзиәгә күҙ һалды. Үҙгәргәнме? Әйтеңе ҡыйын ине. Көлгән саҡта башын артҡа ташлай биреүе битенең уйылып китеүе ҡаштарының үргә сөйөлөүе бөтәһе лә элекке Мәрзиәне хәтерләткәндәй. Эйе, ете йыл әҙ ғүмер түгел. Үҙгәргән Мәрзиә. Элгәре ул һис кенә лә тик ултырмаҫ йә берәй мәҙәк табыр йә синыфташтарын эшкә егер ине. Хәҙер иһә... уйы менән әллә ҡайҙа гиҙә ҡарашы бер һүнә бер тоҡанып ҡуя. Моғайын, һуғыш хәтирәләре зиһенен айҡайҙыр. Етмәһә, ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған сәсе йылмайғанда йылтырап киткән алтын теше һәммәһе лә сырайына ятыраҡ һыҙаттар өҫтәй.

(Ә.Хәкимов.)

**5. Тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып, өҙөктө күсереп яҙығыҙ. Айырымланған эйәрсән киҫәктәрҙе табып, аҫтарына һыҙығыҙ, уларҙың ни өсөн айырымланып ҡулланылыуын аңлатығыҙ.**

Беҙҙең халыҡтың башҡорттарҙың ата-бабаларҙан ҡалған бер сифаты бар. Уны был сифатты ул бер ҡасан да онотмай. Ул да булһа, батырлыҡ, һуғышсанлыҡ сифаты. Урыны килгәндә уның менән маҡтанып ебәрергә лә ярата. Әйтәйек, урыҫ ғәскәрҙәре сафында Наполеонды ҡыуып Парижға беренсе булып барып инеүен дә онотмай. Петроградты ҡамаған Юденичяуҙарын тар-мар итеүҙә ҡатнашыуын да ҙур ғорурлыҡ менән иҫкә ала. Ә бына үҙенең әсә теленә хөрмәт тәрбиәләргә кәрәклекте ул онота. Улай ғына ла түгел, хатта үҙенең туған теленән кәмһенә. Борондан батша заманынан тороп ҡалған хата ҡараш. Бына ошо ҡараштан сығып ул балаһын үҙ телендә асылған мәктәпкә бирергә теләмәй тора. Ул ахмаҡ урыҫ йәки татар телен генә хөрмәт итә, уларға мәктәп теле, белем теле тип ҡарай. Ә үҙ теле – ҡара халыҡ теле... Бына бит ниндәй хата ҡарашҡа өйрәнгәнбеҙ беҙ тиләләр! Ә бит беҙҙең бик борондан килгән ғәжәп бай, сәсән, йор телебеҙ бар. Үлмәҫ йырҙарыбыҙҙы, моңдарыбыҙҙы, хикмәтле хикәйәттәребеҙҙе, легендаларыбыҙҙы шул телдә тыуҙырған бит халыҡ!

(З.Биишева.)

**6. Әҙәби әҫәрҙәрҙән түбәндәге схемаларға ярашлы һөйләмдәр табып яҙығыҙ.**

1. “Т, - а. – Т?” 2. “Т? – а. - Т”.
3. “Т! – а. - Т”. 3. “Т, - а, - т”.

**7. Бирелгән һөйләмдәргә тулы синтаксик анализ эшләгеҙ.**

Ҡош һауала ғына оҫҡан кеүек, балыҡ һыуҙа йәшәгән кеүек, үҙ халҡына - эшселәргә барҙы баһадирҙай йәшәргә егет. (М. Хәй). Елеп тә генә елеп үтер инем, менгән дә генә атым кир булһа, башҡайымды алып китер инем, ышыҡланып торор ер булһа. (Халыҡ йыры). Һылыу Днепр менән уйсан Ағиҙелде меңәр саҡырымдар айырһа ла улар араһындағы юлдарҙы дәһшәтле һуғыш йылдарында ут-ялҡындар кәртәләп торһа ла, Украина менән Башҡортостан араһындағы дуҫлыҡ юлының һис ҡасан өҙөлгәне юҡ. (Р. Бикбаев). Сәрмәсән буйындағы әрәмәлектә быйыл ҡара бөрлөгән шул тиклем уңды, сентябрь етеүгә ҡарамаҫтан, кешеләр күнәк тултырып йыйып ҡайталар. (Р.Ғабдрахманов). Ҡарсығалар ҡая һайлағандар, олатайҙар тауҙы һайлаған, шуға ла улар нигеҙ ташын далаларға барып һалмаған. (Ғ.Дәүләтов). Кешеләрҙең төштәренә күк күкрәүе бомба шартлаған кеүек кермәһен өсөн тағы ла уяуыраҡ торам һаҡта. (Ғ.Ибраһимов). Урман батыр, ахыр сиктә, асыуланып ҡылысы менән һаҙға һелтәп ебәрәһә, ҡылыс инеп киткән урындан урғып һыу сыға башлаған. (Ж. Кейекбаев). Яуап биреүсе булмағас, Касьянов күсер киткән яҡҡа бер-ике аҙым яһаны ла кире боролдо. (Я. Хамматов). Аяҡтары талғансы, Ҡасҡын тау артынан ҡояш күтәрелгәнсе, Ҡаҙаяҡ буйында йөрөйҙәр Әхмәт менән Сания. (Ә.Хәкимов).

**8. Түбәндәге ҡушма һөйләмдәрҙең теркәүес менән килгәндәрен бер бағанаға, теркәүеслеләрен икенсе бағанаға бүлеп яҙығыҙ, синтаксик анализ эшләгез.**

Ул мине йоҡонан бик иртә уятты ла, мин ат эҙләргә киттем. (Ә. Чаныш). Алтын да бар Уралда, көмөш тә бар Уралда, Урал – бай тау ул. (Ҡ. Даян). Үтте ҡыш, килде матур яҙ, боҙло ҡарҙар иренеләр, көҙ көнө киткән матур ҡоштар тағы ла килделәр. (М.Ғафури). Көслө елдәр,штормдар булды, хатта баржалар Кама менән Волга ярҙарына ырғытылды. (Ә.Бикчәнтәев). Кис менән ҡайһыһы ашай, эсә, ҡайһылары балаларын йоҡлата, ҡайһылары бисәһе менән талаша, ҡайһылары йыйылып ултыралар ҙа күргәндәрен, белгәндәрен һөйләшәләр. (А. Таһиров). Иртәнгеһенә иртәнсәк иптәштәре урманға киткән, ә Аҡъял батыр өйҙә ҡалған. (“Аҡъял батыр” әкиәте). Башҡорт халҡының ике яраҡан әйбере бар: уның береһе ҡымыҙ, икенсеһе – сәй. (М.Тажи). Был һуғыштвр ауыр булды, бик күп ҡандар түгелде, йәп-йәш кенә меҫкен йәндәр ҡара ергә күмелде. (“Рус-төрөк һуғышы бәйете”). Тау араһынан барғанда ҡояш рәтле күренмәй: йә уны эре ағастар ҡаплай, йә бейек тауҙар был ерҙән йәшереп торалар. (М. Ғафури). Ҡояш балҡыр, ер әйләнеп торор,яҙҙар булыр, ағыр йылғалар. (Б.Бикбай). Күлде ҡамыш матурлай, ирҙе намыҫ матурлай. (Халыҡ мәҡәле). Мине икенсе бригадаға ебәрергә маташып ҡараны – булманы. (А. Карнай). Ҡушма һөйләм. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм. Теҙмә ҡушма һөйләм өлөштәре араһында тыныш билдәләре.

**9. Күрһәтелгән схема буйынса һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.**



**10. Бирелгән һөйләмдәрҙең тыныш билдәләрен ҡуйып, эйәрсән һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.**

Кем үткәрә баштан ауыр ҡайғы шул нығ белә йәшәү ҡәҙерен тормош матурлана барған һайын һалҡыныраҡ тоя ҡәберҙе. (Б.Бикбай). Тик шуныһы аңлашылмай ниңә минең атай ауырыуға шатланалар улар. (Ә.Чаныш). Инһәк картина шундай бүлмәләге башҡа тороусылар береһе лә юҡ. (А.Карнай). Һуғыш арҡаһында аҙыҡ-түлек хаҡтары күтәрелеп киткән ҡалаға ҡыш сыҡҡансы ит май тейәп бер нисә тапҡыр барып ҡайта Собханғол старшина. (З. Биишева). Әгәр ҙә беҙ әйткән китап журналды ебәрмәһәң бөтәбеҙ ҙә үпкәләрбеҙ. (Д. Юлтый). Сөмбөлдөң баҡсасылары янына Гүзәл менән бригадир алып килгән колхозсылар ҙа ҡушылғас яр буйы бөтөнләй йәнләнеп китте. (И. Ғиззәтуллин). Нигеҙен халыҡ ҡорған ҙур бинаны ил ҡушҡанса һалдыҡ беҙ дошмандарҙың һөжүменән һаҡлап еңеүселәр булып ҡалдыҡ беҙ. (С.Ҡудаш). Мин ышанам беҙ әҙерләгән ошо бригада ла йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәҫ. (Ф. Иҫәнғолов). Атайым да ҡышын бөткәс Ырымбурҙан ҡайтҡан һайын Көпөлө урманын йәйәүләп уҙыуы бигерәк тә ҡыйын булды тип һөйләй торғайны. (З.Биишева). Мотор тауышы ҡамасаулағанлыҡтан Кәрим әйткәнде ишетмәгән Әбүзәр бер ни ҙә аңламайынса башын ҡалҡытып ҡараны. (Я. Хамматов).

**Критерии оценки (в баллах):**

| Критерии оценивания решения расчетных задач | Количество баллов |
|---|---|
| В логическом рассуждении и решении нет ошибок, задачи решены не менее 80%; | 3 |
| В логическом рассуждении и решении нет ошибок, задачи решены не менее 60%; | 2 |
| В логическом рассуждении и решении нет ошибок, задачи решены не менее 50%; | 1 |
| Имеются существенные ошибки в логическом рассуждении и в решении; отсутствует ответ на задание. | 0 |

**Решение индивидуального задания по модулям**

**Индивидуальное задание №1**

*1.* **Түбәндәге һөйләмдәрҙә синонимдарҙы табып билдәләгеҙ. Уларҙы**

**антонимдар менән алмаштырығыҙ. Мөмкин булған урындарҙа фразеологик берәмектәр менән алмаштыҡулланып, тексты күсереп яҙығыҙ.**

Эйе, кешенең күңелендә әллә ни тиклем уйҙар ҡайнаша ине. Бөгөн таң һарыһы менән тороп, итек йөҙлөгөнә ысыҡ һирпелдереп, урманға сығып китте ул. Әллә ни саҡлым юл үтте, үҙе гиҙгән ерҙәр, урман-һыуҙар хаҡында осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарға сумды; ер күрке урмандың үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген күҙ алдына килтерергә тырышты.

Бына әле ҡурай тартып алғас, уның ошо уйҙары асыҡлана төшкәндәй тойолдо, улар бер епкә теҙелеп ағырға кереште.

Һай урманым, урманым, күпте күргән урмандарым минең. Һинән башҡа – ерҙе, һинән айырып һыуҙы, үҙем һулаған һауаны күҙ алдына килтереп буламы? Һин юҡ икән – ерҙең йәме, күрке юҡ; һин туплаған дым бөттөмө - йылғалар ҡорой, һин шифалы һутыңды сәсмәнеңме – тыны ҡурылыуҙан ерҙә әҙәм заты ҡалмаç ине. Эйе, һин әҙәм балаларын утлы, һыулы, ризыҡлы, йорт-ерле иткәнһең, Ер йөҙөндә тереклек башланғандан бирле кешеләр һинән ни саҡлы изгелек күрҙе икән? Иçәпләп бөткөһөҙҙөр. Ләкин бына улар бөгөн ошо хаҡта ныҡлап уйлап ҡарайҙармы? Үткәндәрҙе иçкә алып ҡына ҡалмайынса, алдағы ғүмерең тураһында ла хәстәрлек күрәләрме? (Н.Мусин.)

**Индивидуальное задание №2**

**2. Тексты һөйләмдәргә бүлегеҙ һәм тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып күсереп яҙығыҙ, һүҙ төркөмдәренә морфологик анализ эшләгеҙ.**

Балыҡ ҡармаҡларға күптән ваҡыт инде Юлдаш йәтеш кенә һикәлтә булып һыу эсенә ослайып ингән яçмаҡ ташҡа атланып ултырҙы ла аяҡтарын һыуға тыҡты ҡыҙыҡһыныпмы әллә суртандан ҡасыпмы таш араһында емһәнеп йөрөгән ҡыҙылғанаттар алабуғалар уның аяҡ тирәһенә йыйылды Ҡыҙырас унан аҙ ғына арыраҡ ултырҙы улар кисә тиреçлектән ҡаҙып әҙерләп ҡуйған бер банка селәүсендең иң һимеҙҙәрен ҡаптырып ҡармаҡтарын һыуға ырғыттылар бында балыҡ ҡармаҡлауы бик ҡыҙыҡлы ине һыу өçтө көҙгө кеүек яҡты үтә күренмәле бик алыçҡа тиклем ҡайҙа ниндәй балыҡ йөрөгәне тотош күренеп тора хатта ҡармаҡ та күренә шулай ҙа балыҡтар һис тә абайлап тормай килә лә ҡаба тимәк уларҙың бында ҡармаҡҡа ҡабып ауыҙҙары бешмәгән әле. (З.Биишева.)

**Индивидуальное задание № 3**

**3. Һөйләм киçәктәренең урыны боҙоп бирелгән өҙөктө, дөрөç тәртиптә урынлаштырып, күсереп яҙығыҙ. Һөйләмдәргә синтаксик анализ эшләгеҙ.**

Берлин университеты доценты

Маргарет Эрсен-Раш 1995 йылда Берлин университеты доценты башҡортса яһап сығыш Бөтә донъя башҡорттары бик күптәрҙе ҡоролтайында хайран ҡалдырҙы. Саф башҡортса һөйләне үҙе тураһында ошоларҙы:

- Килдем Германиянан мин. Эшләйем Азат университетының Берлиндағы Тюркология институтында үҙем. Төрөк, башҡорт, татар, әзербайжан унда уҡытам телдәрен.

1992 йылда ҡыҙыҡһына башланым мин башҡорт теле менән. Төрөк телен уҡытырға мин килгәйнем Өфөгә ул йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтына. Булды күп дәрестәр, ваҡыт өйрәнергә башҡорт телен ҡалды әҙ. Ҡайтҡас Германияға, өйрәнә етди башҡорт телен башланым. 1993 йылдың үҙем менән март айында ала инем һөйләшә башҡортса ҡысҡырып. Ә башҡорт телен талиптарға уҡыта башланым апрелендә. Башҡорт теле, музыкаһы, бейеүе менән бер нисә бик ҡыҙыҡһынды студентым. 1993, 1994 йылдарҙа булды Башҡортостанда улар.

Берлиндан тыш, уҡыттым етеҙ ысул менән Майнц университетында башҡорт телен. Шундағы Михаэль Гесс үҙе хәҙер талиптарымдың береһе Майнцта уҡыта башҡорт телен. Тәржемә итте башҡорт әкиәттәрен тиçтәләгән ул немецсаға. (“Башҡортостан”)

**Тексты уҡығыҙ, һәр һөйләмдең эйәһен һәм хәбәрен табығыҙ, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмдәренән килеүен билдәләгеҙ.**

Май һауаһы шул тиклем хуш еҫле, һулап туйғыһыҙ, тротуарҙың ике яғынан да аллы-гөллө сәскәләр теҙелеп киткән. Көн кискелеккә ауышҡас, ҡояш нуры ҡыҙарып, бөтә үҫемлектәрҙе, уларҙы ғына түгел, тирә-яҡтағы барса тәҙрәләрҙе лә сағыулап, балҡытып ебәргән. Ҡыуаҡлыҡтарҙа турғайҙар сырҡылдаша. Бөтә ерҙә йәнлелек, күтәренкелек. Хатта ҡаршыға осраған кешеләрҙең күҙҙәрендә, йөҙҙәрендә лә йылмайыу балҡый, ниндәйҙер һил тантана уларҙы эстән яҡтыртҡандай тойола.

Салауат һәйкәленә ҡаршы майҙанға еңел машиналар каруаны килеп туҡтаған. Һәр береһенә таҫмалар, төрлө төҫтәге шарҙар, сәскә бәйләмдәре тағып ебәргәндәр. Ә иң алдағыһының түбәһенә пар ҡулса беркетелгән. Бына шуныһынан оҙон аҡ күлдәк кейгән бәхетле кәләш килеп сыҡты, күп тә үтмәй үҙен ыҫпай ҡара костюмлы кейәү егет ҡултыҡлап та алды. Арттарынан сәскә гөлләмәләре күтәргән йәштәр, дуҫ-иштәре, ата-әсәләр төркөмө һуҙылды. Улар хәҙер батыр һәйкәленә сәскә һаласаҡ, шунда йәштәр парлашып фотоға төшәсәк, мәңге бәхетле булырға һүҙ ҡуйышасаҡ... (Д.Бүләков.)

**Критерии оценки (в баллах):**

| Критерии оценивания индивидуального задания | Количество баллов |
|---|---|
| Студент выполнил 2 задания без ошибок и недочетов; или допустил не более одного недочета | 2 |
| Студент правильно выполнил не менее половины работы или допустил: не более двух грубых ошибок; или не более одной грубой и одной негрубой ошибки и одного недочета; или не более двух-трех негрубых ошибок; или одной негрубой ошибки и трех недочетов; или при отсутствии ошибок, но при наличии четырех-пяти недочетов; | 1 |

## 5. Учебно-методическое и информационное обеспечение дисциплины

### 5.1. Перечень основной и дополнительной учебной литературы, необходимой для освоения дисциплины

**Основная литература:**


1. Хәҙерге башҡорт теле: филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. - Өфө: Китап, 2011.
2. Башҡорт теленең практик курсы: Практик дәрестәр өсөн күнегеүҙәр / төҙөүсеһе Н.А.Ласынова. – Өфө: БДУ, 2009.– 58 б.
3. Башҡорт теленең практик курсы. -Өфө: БДУ, 2002.–51б.
4. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. - Өфө: Китап, 2005. – 264 бит.
5. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. - Өфө: БДУ, 2002. – 388 бит.
6. Ишбулатов Н.Х. Башҡорт теле һәм уның диалекттары. - Өфө: Китап, 2001.
7. Кейекбаев Ж.Ғ. Башҡорт теленең фонетикаһы. - Өфө: БДУ, 2002.
8. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теле. - Өфө: БДУ, 2001.
9. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. - Өфө:БДУ, 2002
10. Ҡаһарманов Ғ.Ғ. Башҡорт теленең лексикаһы һәм терминологияһы: Уҡыу әсбабы. – Стәрлетамаҡ: Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты, 2002. – 242 бит.
11. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Башҡорт теле. 1т. Ябай һөйләм синтаксисы. - Өфө: Китап, 1999.
12. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Башҡорт теле. 2т. Ҡушма һөйләм синтаксисы. - Өфө: Китап, 2001.
13. Тикеев Д.С. Хәҙерге башҡорт теле. Ябай һөйләм синтаксисы: Юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслек. - Өфө: Ғилем, 2002. – 178 бит.
14. Хәҙерге башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты студенттары өсөн дәреслек. - Өфө: Китап, 1986.- 400 б.
15. Әхтәмов М.Х. Хәҙерге башҡорт теле. Лексикология, фразеология, лексикография: Уҡыу ҡулланмаһы. - Өфө: БДУ, 2002. – 208 бит.
16. Әхтәмов М.Х., Ишбулатов Н.Х. Хәҙерге башҡорт теле. - Өфө: БДУ, 2002.
17. Басырова Г.А., Тикеев Д.С. Простые осложненные предложения в современном башкирском литературном языке. – Уфа: Гилем, 2005. – 140 с.
18. Ишбаев К.Ғ. Башҡорт теленең һүҙьяһалышы. – Стәрлетамаҡ: СДПИ,1999.
19. Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В. Әсә теле. - Өфө, Китап, 2001.
20. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. һ.б. Башҡорт теле. Педагогия училищелары өсөн дәреслек. - Өфө, 1997.
21. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Башҡорт теленең стилистикаһы һәм пунктуацияһы. - Өфө: Китап, 1978.
22. Ураҡсин З.Ғ. Ҡыҙыҡлы грамматика. - Өфө, 1983.
23. Хөснөтдинова Р.Я. Хәҙерге башҡорт телендә атама һөйләмдәр. - Өфө:БДУ, 2002.


### 5.2. Перечень ресурсов информационно-телекоммуникационной сети «Интернет» и программного обеспечения, необходимых для освоения дисциплины

1. tel.bashqort.com
2. strbsu.ru›wp-content/uploads/2013/05/pbash.pdf
3. ostaz.ru

## 6. Материально-техническая база, необходимая для осуществления образовательного процесса по дисциплине

| **Наименование специализированных аудиторий, кабинетов, лабораторий** | **Вид занятий** | **Наименование оборудования, программного обеспечения** |
|---|---|---|
| **1** | **2** | **3** |
| Аудитория 417 | Практические занятия | Демонстрационное оборудование: доска, проектор – 1 шт., переносной экран – 1 шт. Специализированная мебель: столы, стулья (26 посадочных мест). |

| № п/п | Тема и содержание | Форма изучения материалов: лекции, практические занятия, семинарские занятия, лабораторные работы, самостоятельная работа и трудоемкость (в часах) | | Основная и дополнительная литература, рекомендуемая студентам (номера из списка) | Задания по самостоятельной работе студентов | Форма текущего контроля успеваемости (коллоквиумы, контрольные работы, компьютерные тесты и т.п.) |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | | ПР | СР | | | |
| 1 | 2 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| 1. | Башҡорт теленең һүҙлек составы. Актив һәм пассив лексика. Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең лексикаһы. Семасиология. | 2 | 6 | 1-4 | Лексический анализ слов, творческая работа | индивидуальное задание, тесты, контрольная работа №1. |
| 2. | Морфология. Исем. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең һан, эйәлек, хәбәрлек, килеш категорияһы. Исемдәргә грамматик анализ. | 2 | 6 | 1-4 | Морфологический анализ слов, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 3. | Сифат. Төп һәм шартлы сифат. Сифат дәрәжәләре. Сифаттарға грамматик анализ. | 2 | 6 | 1-4 | Морфологический анализ слов, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 4. | Һан. Һан төкөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Һандарға грамматик анализ. | 1 | 6 | 1-4 | Морфологический анализ слов, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 5. | Алмаш. Алмаш төркөмсәләре. Алмаштарға грамматик анализ. | 1 | 6 | 1-4 | Морфологический анализ слов, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 6. | Ҡылым. Ҡылымдың башланғыс формаһы. Ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ, кәсемлелек-кәсемһеҙлек, зат, һан, заман, һөйкәлеш, йүнәлеш категорияһы. Ҡылым төркөмсәләре. Ҡылымдарға грамматик анализ. | 2 | 6 | 1-4 | Морфологический анализ слов, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 7. | Рәүеш. Рәүеш төркөмсәләре. Рәүеш дәрәжәләре, уларҙың яһалышы. Рәүештәргә грамматик анализ. | 1 | 6 | 1-4 | Морфологический анализ слов, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 8. | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Теркәүестәр. Бәйләүестәр. Киҫәксәләр. Модаль һүҙҙәр. Ымлыҡтар. Оҡшатыу һүҙҙәре. | 1 | 6 | 1-4 | Морфологический анализ слов, творческая работа, индивидуальное задание №2, | индивидуальное задание, тесты, контрольная работа №2 |
| 9. | Синтаксис. Пунктуация. Һүҙбәйләнеш. Теҙмә һәм эйәртеүле һүҙбәйләнеш. Эйәртеүле һүҙбәйләнештә һүҙҙәрҙең синтаксик бәйләнеш юлдары. | 2 | 6 | 1-4 | Синтаксический разбор предложений, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 10. | Баш һәм эйәрсән киҫәктәр. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәр. Өндәш һүҙҙәр. Инеш һүҙҙәр һәм инеш һөйләмдәр. | 2 | 6 | 1-4 | Синтаксический разбор предложений, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11. | Ҡушма һөйләм. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесheҙ теҙмә ҡушма һөйләм. Теҙмә ҡушма һөйләм өлөштәре араһында тыныш билдәләре. | 2 | 6 | 1-4 | Синтаксический разбор предложений, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 12. | Эйәртеүле ҡушма һөйләм. Баш һәм эйәрсән һөйләм. Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдә тыныш билдәләре. | 2 | 6 | 1-4 | Синтаксический разбор предложений, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 13. | Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр, уларҙа эйәртеүле бәйләнеш ысулдары. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 2 | 6 | 1-4 | Синтаксический разбор предложений, творческая работа | индивидуальное задание, тесты |
| 14. | Тура телмәр һәм ситләтелгән телмәр. Тура телмәрҙә тыныш билдәләре. | 2 | 5,8 | 1-4 | Синтаксический разбор предложений, творческая работа | индивидуальное задание, тесты, контрольная работа №3 |
| 15. | Зачет | 0.2 | | | | |
| | **Всего** | **24.2** | **83,8** | | | |